# Кышта кунакта





Ҡышҡы урман — үҙе серле донъя,
Тып-тын ҡалған ниҙер көткәндәй;
Ҡарһылыуҡай минең алдан ғына
Ынйыларын һибеп киткәндәй.
Сафуан Әлибаев.







**Тәүге ҡар**

Ҡыштың матурлығы —
аҡ-аҡ ҡарҙа,
Зәңгәр бәҫ һырыған урмандарҙа.
Өтөп-өтөп алған һыуыҡтарҙа,
Дыуамал һәм уҫал буран дарҙа.

*Йомабикә Ильясова*





Ҡар яуғас,
Ҡыш булғас,
Бар ағас
Яланғас.

Рәми Ғарипов



**Һалҡын ҡыш еткәс,**
**Йылғалар туңды.**
**Айыу өңөндә**
**Йоҡоға сумды.**



# *Кышкыһын нимә кейәләр?*

**Бәлтәм менән кейәм мин,**
**Итек тә түгел үҙе.**
**Матур итеп баҫылған,**
**Аяҡка йылы үҙе.**



**Дүртәү өйгә уҙа,**
**Берәү соланға инә.**



Бер ягы урман,
Бер ягы ҡорган.





# *Д е к а б р ь – а к ъ ю л а й*

**Ун ике туған,**
**Теҙелешеп торған.**
**Шуларҙың иң кесеhе?**



*<u>Д е к а б р ь</u> йылдың аҙағы, ҡыштың башы.*
**Был айҙы халыҡ юҡҡа ғына *<u>а ҡ ъ ю л а й</u>* тип атамаған, йыш яуған ҡарҙан юлдар тапалып, ҡарайып өлгөрмәй. Йылға – күлдәр ҡалын боҙ өҫтөнән тағы ҡар менән ҡаплана. Әле баҫылып өлгөрмәгән ҡар өҫтөнән йөрөй алмаған йәнлектәр юл буйҙарын төйәк итә. Шуға ла декабрҙә төлкө, ҡуян, боландарҙы юл ситендә осратырға мөмкин.**





- Декабрҙә шамбы балығы ыуылдырыҡ сәсә.
- Ҡалғандары шулай уҡ тәрәнгәрәк күсеп, ҡышты йоҡомһорап үткәрә. Сөнки, ҡышҡы һыу аҙыҡҡа ла, кислородҡа ла наҡыҫ.
- Урман – ҡырҙарҙың үле тынлығын был осорҙа һунарсылар һәм балыҡсылар ғына борсой.



# Ҡыш бауыры оҙон.



Ҡышын да, йәйен дә йәм –йәшел.











# *Кышкы кунактар*



**Свиристели -  мышар турғайҙары**



Эй, ҡыҙылтүш, ҡыҙылтүш,
Осоп кил дә ергә төш.
Баҡсамда уйнап ос һин,
Ҡышты йәмләүсе ҡош һин.



Ҡыҙылтүш турғайҙар — снегири



Синица – ҡарабаш  турғай



**Бер ҡошом бар, тынмай,**
**Ағасҡа оя ҡормай.**
**Өйө — ерҙә,**
**Йыры — күктә.**

***турғай***



**Сырҡылдашып осоп йөрөп
Ағастарға ҡуналар.
Һыу күрһәләр, йүгерешеп
Ҡанаттарын йыуалар.**



**Бар белгәне «ҡар» ҙа, «ҡар»,**
**Йәй көнөндә лә ҡар даулар.**

***Ҡарға***



Тағараҡ элдем ағасҡа,
Турғайҙар килеп ҡунды.
Дуҫтарҙы һыйлап ҡыуандым,
Күңел шатлыҡҡа тулды.

Ҡышын ҡоштарға ем табыу ауырлаша,
шуға ла балалар тағараҡтар эшләп элә.



Тәҙрәмдән ҡыш көнөндә
Осоп инде бер турғай:
 —Ем бирсе, — тиеп һорай,
Еләне һары ғына:
 —Ашайым тары ғына.

# *Ғ и н у а р – һ ы у ы ғ а й*

Был айҙа тәбиғәт
ысын мәғәнәһендә йоҡлай.

Ошо айҙағы
иң һалҡын көндәр
***<u>с е л л ә</u>*** тип атала.





Ғинуар –  йылдың башы, ҡыштың уртаһы.

Бесәй ишекте тырнаһа- буран,
йомарланып ятһа – һыуыҡ була.

Елһеҙ көндө урман шаулаһа, көн боҙола.

Төтөн тура сыҡһа – һыуыҡҡа тарта.

Йондоҙҙар емелдәп янһа - һалҡынға.

Ҡыш көнө ҡояш ҡыҙарып ҡалҡһа – һалҡын булыр.

Ай ҡолаҡланһа(ай тирәләй түңәрәк хасил булһа) – һалҡынға.

Ошо уҡ һынамыш ҡояшҡа ла ҡағыла,
тик халыҡ ҡояш ҡәртәләнә тип әйтә.

# Ҡыш ҡарһыҙ булһа, йәй ярлы була.





# Ҡыш – ағыраҡ, йәй –йәшелерәк.



- Көҙ йылы килһә – ҡыш оҙон була.
- Сентябрь аяҙ булһа – ҡыш һалҡын булыр.
- Көҙ оҙон булһа – яҙ һуң килер.
- Миләш уңһа – ҡыш һалҡын булыр.
- Көҙ аяҙ булһа – аҙыҡ аҙ булыр.
- Көҙ көнө ағастар япраҡтарын ҡоймаһа – халыҡҡа ауыр булыр.







*Тайғалаҡ*

*боҙғалаҡ*

*боҙлауыҡ*

**Шыуып китеү менән боҙҙа**
**Барып та төштө Кәли.**
**Тора – ҡолай, тора – ҡолай,**
**Арыны, бөттө хәле.**



# *Ф е в р а л ь – ш а к а й*



«Их, ғинуар булһам, һыйыр мөгөҙөн һындырыр инем» - тигән ти, был ай.

Бер йылытып, бер һыуытып торғандан, бөтә нәмәне шаҡырайтып туңдырғандан халыҡ уны элек *ш а ҡ а й* тип атаған.



Февралдә һыйырҙар быҙаулай, һарыҡтар бәрәсләй башлай. Тауыҡтар йомортҡа һалырға керешә. Ағастарҙа бөрөләр бүртә. Урман – ҡырҙарҙа төлкө, бүреләрҙең туйҙары башлана, улар был мәлдә ныҡ уҫаллана. Аҡландарҙа ҡуяндар уйнай. Ай аҙағында тәбиғәттә мөғжизәле күренеш – _*һ у й ы р   у й н а у ы*_ башлана. Мышылар мөгөҙҙәрен һала.



***Һ ы н а м ы ш т а р***

- Февраль ныҡ буранлы булһа, август ямғырлы булып, ужым уңыр.
- Ҡайын ботағында ҡар алҡа-алҡа булып аҫылынып торһа, иген уңыр.
- Бәҫ күп булһа, бал күп булыр
- Февраль һалҡын һәм ҡоро торһа, август эҫе буласаҡ.

# *Йомаҡтарҙың яуабын тап:*



Аҡ бабай, аҡ бабай,
Аҡ тунынды ҡаҡ, бабай!



**ҡыш**



Аяғы юҡ, ҡулы юҡ,
Үҙе һүрәт төшөрә.

һыуыҡ





Ҡарағыҙсы, ағастарға
Төшкән ҡалын ...
Эй, ҡыҙыҡ, гүйә ағастар,
Торғаны әтәс.

бәҫ

Аҡ ашъяулыҡ таптым,
Ер өҫтөнә яптым.



ҡар



Ҡырҙан гел ҡарҙар ташый,
Бер тына, йәнә башлай.
Күҙ асҡыһыҙ, тиҙәр ул,
Ыжғыр көйөн көйләр.



буран



**Ҡулы юҡ, аяғы юҡ,**
**Тәҙрәмде ҡаҡҡылай,**
**Тартҡылай, һуҡҡылай,**
**Өйгә инергә һорай.**



**ел**







Мин — йондоҙсоҡ,
Мин — биҙәк,
Шундай еңел, елбәҙәк.
Күрһә мине балалар:
—Оса, — тиҙәр, — күбәләк.

**Ҡар бөртөгө**



Йәйен түгел, үҫә кыш.
Үҫә баш түбән килеш.

бозбармаҡ

Килделәр ағайҙар балтаһыҙ,
Күпер һалдылар тактаһыҙ.



боҙ

# Тәбиғәттең мөғжизәһе



Бөтә ауылға бер ҡаҙан.



мәке



**Был биҙәкте кем яһаған**
**Ҡар сәскәләрен ҡуйып?**
**Тәҙрәнән тыш күренмәй**
**Яһаған уны …**

**Һыуыҡ**




**Өйөм-өйөм тауҙар был,**
**Кем яһаған, ҡайҙан был?**
**Таштарҙан түгел тауҙар,**
**Ынйы бөртөк ҡарҙарҙан.**



**көрт**

## *Тышта саф һауа*

Сал ҡыш миңә низер һөйләй,
Мин шыуған һайын.
Ә саңғыһыҙ шыуа күктән
Нур ҡойған айым.
Рәми Ғарипов



Ултырып шыуам уға,
Бурандар туҙып ҡала.
Шундай етеҙ нәмә ул,
Әйҙә әле, әйтеп ҡара!



Бик ҙур көҙгө өҫтөндә
Тимер аттар сабалар.










Тауҙан шыуыу





Кышҡы алыш



Ҡарҙан нығытма





Ҡар сәпләп уйнау



Саңғыла йөрөү







Сана шыуыу



Автор: Берюхова Е.К.
Тәржемә : Торомтаева Р.Ю.
Сибай ҡалаһы «Ирәндек» лицейы

Вы скачали презентацию на сайте – viki.rdf.ru